*Лариса АБДУЛЛИНА*

# "Рухи ҡалҡан була алһам..."



Ул йәш, әммә ижадтың, сәмдең, еңеү-еңелеүҙең, танылыуҙың тәмен төрлө өлкәләрҙә татыған кеше. Хатта Айгөл Үтәгәнованың төп шөғөлө нимә икәнен аныҡ ҡына әйтеүе лә ауыр: төрлө сәхнә әҫәрҙәре режиссеры, сценарий авторы, йырсы, йырҙар ижад итеүсе, продюсер... Хәйер, бөтәһен дә һанап бөтөп тә булмаҫ кеүек, сөнки бала сағынан һәр ҡылығы, һәр өнө менән үҙенсәлеген күрһәткән был ҡыҙ бар булмышы менән кешеләргә байрам бүләк итеү өсөн яралған төҫлө. Юҡ, улай ғына ла түгел, һәр ҡылығында, бар булмышында тере ижад кешеһе. Уны күрмәүе, уға иғтибар итмәүе мөмкин түгел.

Ҡыҙ баланы сәскәгә оҡшаталар. Бәлки, шуның өсөн Рәмилә апай ҡыҙы тыуған йылды лилиә гөлөн ултыртҡандыр. Әллә ҡыҙының емешле ижад итеүенә ишаралап, был гөл һәр йыл һайын тап Айгөл тыуған мәлдә сәскә ата башлай. Атаһы Илгиз ағай ҙа был күренеште бары изгегә юрай. Ә ҡыҙыҡай бәләкәйҙән, ысынлап та, үҙенсәлекле була. Мәктәпкә барыу, бигерәк тә 1 сентябрҙә синыфташтар, белем донъяһы менән осрашыу уның өсөн бала сағының иң сағыу байрамдарына әүерелә. Бына ул, Айгөл, өр-яңы әйберҙәрен алып, кистән һөртөлгән хушбыйҙан татлы еҫтәр бөркөп торған кейемдәрен кейеп, тантаналы көнгә ашыға. Уның уйҙары, теләктәре унан да алда бара кеүек. Етмәһә, ике көндән тыуған көнө еткәнен дә иҫәпкә алһаң, яңы китаптар, буялған парталар, төрлө гөлләмәләр менән хәтерҙә ҡалған сентябрь оҙағыраҡ һуҙылһын ине, тип уйлай ҡыҙыҡай. Ф.Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында уҡыу еңел бирелә Айгөлгә. Йырҙар яҙған, Бабич ижады менән шашып мауыҡҡан ҡыҙ, бәлки, кемгәлер сәйер ҙә тойолғандыр. Сөнки Айгөл Бабичтың «Ғазазил»ы менән йәшәй, унан үҙенә көс ала, поэманы тулыһынса яттан һөйләй. Ул һәр фәнде, бигерәк тә телдәрҙе, әҙәбиәтте ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Шуға ла ул үҙенең төрлө өлкәләр менән мауығыуын иҫәпкә алып, БДУ-ның журналистика бүлегенә уҡырға бара.

Алты йәштән сәхнәнән төшмәгән, 14 йәшендә Өфөлә үткәрелгән автор йыры конкурсында Гран-при, республика автор йыры конкур-

сында I урын яулаған Айгөл Үтәгәнова университетта уҡығанда уҡ үҙен күп популяр йырҙар авторы, йырсы булараҡ та таныта. «Карауанһарай» фольклор-эстрада, «Йәдкәр» фольклор, «Далан» төркөмдәре Айгөл ижад иткән йырҙарҙы башҡара. Хәйер, айырым башҡарыусыларҙан Сәғиҙулла Байегет, Венера Рәхмәтуллина һәм башҡа бик күп йәш йырсылар Айгөлдөң йырҙарына мөрәжәғәт итә. Бала саҡтан йырҙарҙы күберәк русса йырлаған һәм шиғырҙарҙы тик рус телендә яҙған ҡыҙыҡайҙың Ғафури районында йәшәгән туғандары, ата-әсәһенең тыуған төйәге менән аралашыуы башҡорт мөхитенә, ғәзиз мөхитенә яҡынайыу, башҡортса йырлау теләген яралта. Айгөлдөң әсәһе Рәмилә апайҙы нәҫел-нәсәптәре араһында иң моңлоһо, тиҙәр. Күрәһең, ҡыҙы уға моңға ынтылышы менән оҡшаған. Әммә Айгөл үҙен атай ҡыҙы тип иҫәпләй. Хәйер, ҡыҙ баланың атайға тартыуы, атай ҡыҙымын, тип әйтеүе һис тә ғәжәп түгел. Моғайын, Айгөлдөң киң даирәлә ижад итеүен, фекерләй белеүен, аралашыусан, маҡсатҡа ынтылыусан булыуын юҡҡа ғына атаһына оҡшатмайҙарҙыр.

Йырҙар башта ҡыҙҙың күңелендә ярала. Улар, әйтерһең, Айгөлдөң яратҡан миҙгелендәге көҙгө япраҡтар шикелле, яуа ла яуа, яуа ла яуа. Минеңсә, ул юҡҡа ғына: «Тормош миңә күпте бирә, әммә бөтәһен дә файҙаланып өлгөрмәйем», — тип әйтмәй. Сөнки Башҡортостан телевидениеһында яңғыраған йырҙарынан тыш, Айгөл, алда әйтелгәнсә, режиссерлыҡ, етәкселек эше менән дә шөғөлләнә. Ул «Йәшлек-шоу» республика йәштәр эстрада фестиваленең, «Йәш ғаилә», башҡорт гүзәлдәренең «Һылыуҡай», татар һылыуҙарының «Науруз гүзәле» республика конкурстарының режиссеры булған. Әлеге көндә ул «Һомай» шоу-студияһын ойошторған. Унда ҡыҙҙар дефиле, шейпинг, фото сәнғәте, визаж, конферансье, этикет, актер оҫталығы кеүек дәрестәрҙә шөғөлләнә. Айгөлдөң фекерләүенсә, донъяла йәмһеҙ кешеләр юҡ, ә үҙҙәрен матур итеп күрһәтә белмәгәндәр генә бар. Йәнә лә, ул М.Кәримдең «Айгөл иле», «Ташлама утты, Прометей!», Ш.Бабичтың «Ғазазил» әҫәрҙәре аша намыҫ, күңел яҡтылығы, сафлыҡ, эске матурлыҡ кеүек төшөнсәләрҙе тәрән һиҙеп, улар аша тормошто тойорға өйрәнеп үҫә. Ә инде М.Кәримдең «Ярлыҡау» әҫәрен уҡыған һайын Айгөлдөң, бик шәп пьеса ҡарағандағы кеүек, тороп ҡул сабаһы, авторға рәхмәт әйтәһе килә. М.Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр», Ғ.Сәләмдең «Бала» кеүек әҫәрҙәренә лә Айгөл битараф түгел. «Ваҡыт уҙған һайын был әҫәрҙәргә лә ҡараш үҙгәрә, әммә улар шул килеш тә үҙ уҡыусыһын юғалтмай. Шуның менән улар миңә ҡыҙыҡлы», — ти Айгөл был әҫәрҙәр хаҡында.



Әйткәндәй, Айгөл үҙе лә «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр», «Һуңғы Ғәйнә», «Һайрар ҡошом», «Туйға нисә көн ҡалған?», «Искәндәр менән Ләйсән» кеүек пьеса-

ларға йыр яҙған. Ә һуңғыһында үҙе лә журналист ролен башҡарған. Бәләкәйҙән күңелендә театр, кино менән мауыҡҡан ҡыҙ бөгөн дә сәнғәттең был төрҙәре менән ҡыҙыҡһына. Хатта кино төшөрөү теләге менән яна.

Айгөл — Бөтә Рәсәй яҙыусылар сайты авторҙарының береһе. Унда башҡорт ҡыҙының үҙ бите бар. Интернет аша төрлө илдәрҙән, планетаның төрлө мөйөштәренән бәйләнешкә сығыусылар ул яҙған әҫәрҙәр хаҡында фекерҙәрен әйтә, кәңәштәрен бирә. Бынан бер нисә йыл элек Айгөл Өфөлә «Мөхәббәт яһиллығы», «Юлбаҫарҙар һәм сихырсы» гәзит-брошюраларын 12 мең тираж менән сығарҙы. Улар рус телендә яҙылған. Айгөлгә ижад емештәрен донъяға сығарырға «Аҙна» нәшриәт йорто ярҙам иткән. Яҡын киләсәктә йәш ижадсы, яҙған әҫәрҙәрен туплап, башҡортса йыйынтыҡ сығарырға ниәтләнә.

Кемдәр Айгөлдөң концерттарында булғаны бар, улар белә — йырсы башҡорт, рус, инглиз, грек, итальян, ҡаҙаҡ, төрөк, испан телдәрендә йырлай. Телдәр менән мауығыу ҙа бала саҡтан килә. Хәҙер ул киңерәк план алған. Айгөл төрлө халыҡтарҙың телдәре менән генә түгел, мәҙәниәттәре менән дә ҡыҙыҡһына. Ошо рәүешле инглиз, итальян, төрөк телдәрендә иркен һөйләшергә өйрәнгән, ингуш, ҡаҙаҡ, үзбәк, әрмән, фин телдәрен дә ярайһы ғына белә. Телдәр аша башҡа халыҡтың менталитеты, күңел байлығы менән яҡындан танышҡан Айгөл Шекспир әҫәрҙәрен төрлө телдәрҙә уҡып ҡарап, төп нөсхәһендә уларҙың ни тиклем ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс икәнен әйтеп аңлата алмай.

Хәҙер Айгөл үҙе ижад иткән йырҙарҙы ғына түгел, ә халыҡ йырҙарын да башҡара. «Халыҡ йырҙарының тәрәнлеген, бар асылын миңә Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Флүрә Килдейәрованың моңо асты», — ти ул. «Йәйләү», «Каруанһарай», «Илсе Ғайса» кеүек башҡорт халыҡ йырҙарын Айгөл үҙенсә, заманса, замана йәштәре аңларлыҡ итеп, тыңлап һиҫкәнерлек итеп башҡара. Ниндәй стилдә булһа ла, үҙ халҡының мәҙәниәтен, башҡорт рухын, башҡорт моңон пропагандалау — хеҙмәтемдең нигеҙе, ти ижадсы. Һуңғы йылдарҙағы һәр эшенең төп маҡсаты итеп тә Айгөл милли рухты, моңдо башҡа милләттәргә, башҡа яҡтарға таратыуҙы һанай. Күңеленең тәрәнлегендә ятҡан ихлас кисерештәре аша кешеләргә байрам бүләк итергә, һәр аҙымы менән үҙенең башҡорт ҡыҙы, милләттең биҙәге икәнен күрһәтергә теләй ул. Ҡыҙын ихлас ятҡан атаһы Илгиз ағай һәм әлегә тиклем ҡыҙының уңыштарына һөйөнөп, лилиә гөлөнә һыуҙар һибеүсе әсәһе Рәмилә апай уға иң тәүге сиратта һәр ҡылығында ихлас, асыҡ булырға өйрәткән.

Бынан бер нисә йыл элек Айгөл үҙенең ҡәҙерле кешеһен — атаһын юғалтты. Юғалтыуҙар бәндәне яңы тәрән кисерештәргә, тормош асылын аңлау юлында рухи ныҡлыҡҡа алып килә. Атаһы менән хушлашҡан көндән алып Айгөл үҙенең һәр бер, хатта бәләкәй генә уңышын да уға бағышлай, уның кеүек маҡсатҡа ынтылыусан булыуына ҡыуана. «Донъяла әсәйемдән ҡала иң яратҡан, ҡәҙерле кешем — ул Өфө дәүләт авиация техник университетында уҡыған ҡустым Ильяс. Уның өсөн мин тауҙар артылып, диңгеҙҙәр кисергә әҙер», — ти башҡорт илендәге ҡала ҡыҙы Айгөл. Уның был һүҙҙәрендә ғәзиз, яҡын моңдар өсөн генә түгел, кешеләр өсөн рухи ҡалҡан булыу теләге ярылып ята.